МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ

Министерства образования и науки Республики Башкортостан

Администрация городского округа город
Нефтекамск Республики Башкортостан

Муниципальное общеобразовательное автономное учреждение
средняя общеобразовательная школа №11
городского округа город Нефтекамск Республики Башкортостан

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДАЮ |
| --- | --- | --- |
| на заседании ШМО<br>руководитель ШМО<br>учителей родных языков и литературы и ОДНК НР | Заместитель директора по учебной работе<br>МОАУ СОШ №11 | Директора МОАУ СОШ №11 |
| ________________________<br>/И.Ф. Валиева/<br>Протокол №1 от 30.08. 2024г. | ________________________<br>/Р.Р.Ямалтдинова /<br>Протокол МС №1 от 30.08.2024г. | ________________________<br>/И.Г. Аллаяров/<br>Приказ №576 от 30.08.2024г. |

ДОКУМЕНТ ПОДПИСАН
ЭЛЕКТРОННОЙ ПОДПИСЬЮ

Сертификат: 00E04301A6D9BD4262D6EC61772058B4B2
Владелец: Аллаяров Илдар Габидович
Действителен: с 19.06.2024 до 12.09.2025

# КОНТРОЛЬНО-ОЦЕНОЧНЫЕ СРЕДСТВА

## по учебному предмету «Родной язык (башкирский)»

для обучающихся 7 класса

**г.Нефтекамск, 2024**

**Аңлатма яҙыу**

Туған(башҡорт) теленән контроль диктант яҙыу.

Диктант яҙыу текстары дәрестә үтелгән грамматик һәм лексик темалар менән бәйле алына.

Контроль эшенең йөкмәткеһе һәм структураһы түбәндәге документтарға таянып төҙөлдө:

1. "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль законы №273-ФЗ, 29.12.2012й.

2. Нефтекама ҡалаһы 11-се мәктәптең муниципаль дөйөм автономия белем биреү учреждениеһының уҡыу планы.

3. "Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында" законы (№1807, 25.10.1991й.).

4."Башҡортостан республикаһы халыҡтары телдәре тураһында " БР Законы (216 –З, 15.02.1999 й.)

5. Төп дөйөм белем биреүҙең төп белем биреү программаһы.

6. Дөйөм белем биреү ойошмаларында уҡытыу рус телендә алып барылған 5-9 кластар өсөн (башҡорт теле һәм әҙәбиәте) уҡыу предметы буйынса дөйөм белем биреү өлгө программаһы.

7. Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туған телдәрен уҡытыу концепцияһы.

8. Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығы коллегияһы ҡарары 29.08. 2024 йыл.

**Контроль эшенең структураһы һәм үтәлеү вакыты**

Тикшереү эше 1 өлөштән тора.

Контроль эште башҡарыу өсөн 35 минут бирелә.

**VII класс уҡыусыларының башҡорт теле буйынса белемдәрен, белеүҙәрен һәм күнекмәләрен баһалау нормалары**

**Диктанттарҙы баһалау**

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй.

Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим иттеләр.

Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим итерлергә тейеш.

**Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай**:

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;

2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;

3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;

4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу (мәҫәлән: *ата* урынына *аша).*

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Былдай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.

**Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә**:

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;

2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;

3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;

4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

**Диктант бер генә билдә менән баһалана.**

**«5» билдәһе** — тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,

**«4» билдәһе** 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуациоӊ, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«3» билдәһе** 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«2» билдәһе** 9 орфографик, 9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 15 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

**Грамматик биремдәрҙе баһалағанда** түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:

**«5» билдәһе** бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,

**«4» билдәһе** эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

**«3» билдәһе** яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,

**«2» билдәһе** бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

**«5» билдәһе** — тупаҫ булмаған 2 орфографик, 3 пунктуацион хата булған эшкә,

**«4» билдәһе** 5 орфографик, 4 пунктуацион йә 2 орфографик, 7 пунктуациоӊ, йә орфографик хатаһыҙ, 8 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла.

Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 6 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«3» билдәһе** 7 орфографик, 8 пунктуацион йә 4 орфографик, 10 пунктуацион, йә 13 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 9 орфографик, 9 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«2» билдәһе** 10 орфографик, 10 пунктуацион йә 9 орфографик, 11 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 16 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

**Грамматик биремдәрҙе баһалағанда** түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:

**«5» билдәһе** бөтә эште лә теүәл йә бер- ике хата булғанда,

**«4» билдәһе** эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

**«3» билдәһе** яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,

**«2» билдәһе** бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

**Һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән балалар өсөн**

**«5» билдәһе** — тупаҫ булмаған 3 орфографик, 4 пунктуацион хата булған эшкә,

**«4» билдәһе** 6 орфографик, 5 пунктуацион йә 3 орфографик, 8 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 9 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла.

Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 7 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«3» билдәһе** 8 орфографик, 9 пунктуацион йә 5 орфографик, 11 пунктуацион, йә 14 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 10 орфографик, 10пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«2» билдәһе** 11 орфографик, 11 пунктуацион йә 10 орфографик, 12 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Хаталар һаны 16 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

**Грамматик биремдәрҙе баһалағанда** түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:

**«5» билдәһе** бөтә эште лә теүәл йә бер- ике хата булғанда,

**«4» билдәһе** эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

**«3» билдәһе** яртыһынан әҙерәге дөрөҫ эшләнгәндә,

**«2» билдәһе** бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

**Инеш контроль диктанты.**

**Ҡара алтын.**

Нефтте халыҡ алтын менән сағыштыра.Был юҡҡа ғына түгел.Нефттән төрлө нәмәләр эшләнә.Бензин,кәрәсин,мазут кеүек яғыулыҡ майҙарынан тыш,унан ер ашлау өсөн химикаттар ҙа алына.Беҙҙең күлдәк,костюм,кофта һәм ойоҡтарға ла нефттән алынған ептәр ҡушыла.

Башҡортостандың көнбайыш һәм төньяҡ райондарында нефть ятҡылыҡтары табылды.Ҡаланың тирә - яғында нефть вышкалары һәм газ факелдары күп.Был ҡаланы ,нефть һәм Ҡама йылғаһына арнап ,Нефтекама тип атанылар.(75 һүҙ)

**Йыллыҡ контроль диктанты.**

**Халыҡтар дуҫлығы.**

Башҡортостанда төрлө милләт халҡы йәшәй һәм эшләй.

Бәләбәй районы Старо – Семенкино ауылында йәшәүсе Федор Васильевичтың ҡатыны- милләте менән татар. Уларҙың ун балаһы бар. Өлкән улы- мордва ҡыҙына , икенсе улы Гурьян –украин ҡыҙына, өсөнсө улы татар ҡыҙына өйләнгән. Ҡыҙҙары Раиса һәм Ольга рус егеттәренә кейәүгә сыҡҡан. Моисей һм Е втасий исемле улдары сыуаш ҡыҙҙарын алған. Шулай бер ғаиләлә биш милләт вәкиле йыйылған. Беҙҙә ундай ғаиләләр аҙ түгел.